**Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы муниципаль районының муниципаль автоном мәҙәниәт учреждениеһының «Ейәнсура балалар китапханаһы»**










**Журнал кескәйҙәр өсөн тәғәйенләнһә лә, унда мөһим темалар яҡтыртыла. Ҡыҙҙар, малайҙарҙы Башҡортостан тарихы, башҡорт халҡының тарихы, уның күренекле шәхестәре менән дә таныштырып килә.**

«Аҡбуҙат» ғаилә журналына ла әйләнде. Бының сере бик ябай: Әсәй культы, Атай культы шулай уҡ баҫманың тематик йүнәлешен билдәләй. «Ояһында ни күрһә – осҡанда шул булыр», - ти халыҡ мәҡәле. Ғаиләләребеҙ ни тиклем ныҡлы, тәрбиәле, милли тамырлы булһа, киләсәгебеҙ ҙә шул тиклем матур буласаҡ.




Эйе, ысынлап та, бер ҡараһаң, «Аҡбуҙат» - етди журнал. Икенсе ҡараһаң, ул – бик күңелле баҫма. Балалар унып яратыуының сәбәптәре лә бар: әкиәт, хикәйә, шиғыр йә булмаһа уйын, башватҡыс формаһында бирелә.

Башҡортостан Республикаһының балалар журналы
Аҡбуҙат

**«Аҡбуҙат» журналындағы мәҡәлә, хәбәрҙәр күберәк мәктәп тормошо, тыуған төйәккә бағышланған, һүрәтләмәләр – яҡын кешеләре, дуҫтары, синыфташтарына.**



Башҡортостан Республикаһының балалар журналы
Аҡбуҙат

**Кескәй йәштәге уҡыусылар өсөн шиғырҙарҙың төп геройҙары – балалар үҙҙәре. Баланы уратып алған йәмғиәт – беренсе сиратта ата-әсә, олатай-өләсәй һәм туғандар.**


Үҙе мейес башында,
Үҙе тун ябынып йоҡлай.
“Башҡорт халык йомактары”


Ике ҡызыл бағана
Ҡанаттарын ҡағына.
“Башҡорт халык йомаҡтары”


“Башҡорт халык йомаҡтары”
Һоро бүре килде,
Өйөм ситен ҡырҙы.


«Аҡбуҙат» китапханаһы
серияһынан
Рәдиф Тимершин
Йомаҡтар
Рәссам
Салауат Ғиләзетдинов


Аҫтан өҫкә, өҫтән аҫка
Йөрөп булмай унан башҡа.
(Баҫҡыс)

Журнал биттәрендә донъя күргән ҡыҙыҡлы әкиәттәр, хикәйәләр йылдан-йыл тематика, образдар яғынан байый. Әкиәттәрҙә тормош-көнкүреш, халыҡтың йәшәйеше, киләсәккә булған өҙөлмәҫ өмөттәре сағылыш таба.





Башҡортостан Республикаһының балалар журналы

Аҡбуҙат

**Журналда әҙәп-әхлаҡле, башҡорт рухлы, белемле булып үҫергә өйрәтеүсе хикәйәләр ҙур урын ала. Бәләкәйҙән әсә телен яратырға, тыуған илде, тыуған ерҙе яратырға өйрәтеүсе ижад емештәре лә донъя күрә.**



Башҡортостан Республикаһының балалар журналы
Аҡбуҙат

# «Аҡбуҙат» журналындағы рубрикалар

**«Бәпембә»** рубрикаһында кескәйҙәрҙең ижад емештәре – шиғырҙары, мәҡәләләре, һүрәттәре урын ала.

**«Арҙаҡлы шәхестәр».**

Был рубрикала илебеҙҙең күренекле кешеләре, уларҙың башҡарған эштәре, иҫтәлектәре хаҡында яҙыла.

Башкортостан Республикаһының балалар журналы
Аҡбуҙат

## «Еңел инглиз теле».

**Сит телде үҙ аллы өйрәнергә ярҙам итә. Ҡыҙҙар, малайҙар төрлө темаға арналған ябай һүҙҙәрҙе белә, ҙур булмаған текстарҙы тәржемә итеү серҙәренә төшөнә.**

Башҡортостан Республикаһының балалар журналы

Аҡбуҙат

**«Мин уҡырға өйрәнәм».**

**Кескәйҙәрҙе уҡырға, яҙырға өйрәтә. Унда башватҡыстар, һүрәттәр, хикәйәләр ҙә бирелә.**

Башҡортостан Республикаһының балалар журналы

Аҡбуҙат

**«Алтын бишек».**

**Тыуған төйәгебеҙҙең тәбиғәт ҡомарткылары, иҫтәлекле урындары хаҡында һөйләнелә.**

«Аҡбуҙат»та баҫылған күп әҫәрҙәр «Әлиф

нан башлап бик күп дәреслектәргә индерелгән.

Ә журналдың рәссамдары уларҙы биҙәүҙә ихлас

ҡатнаша. Шулай итеп, «Аҡбуҙат» үҙендәге тере

һыуҙы күңелдән-күңелгә, йөрәктән-йөрәккә

өләшеп, йәш быуын өсөн тылсымлы тәрбиәсегә

әйләнә бара.



«Аҡбуҙат» – киләсәк баҫмаһы, сөнки уның уҡыусылары – илдең йәш хужалары. Халҡыбыҙ, милләтебеҙ яҙмышы гәзит-журнал уҡыусылар ҡулында. Журнал киләсәктә лә илгә лайыҡлы алмашсылар тәрбиәләүҙә иң яҡын, иң тоғро ярҙамсы.




**И Ғ Т И Б А Р!!!**

**Дуҫтар, тик һеҙҙең өсөн генә тағы ла бер**
**ШАТЛЫҠЛЫ ХӘБӘР!**

**Осһоҙ хаҡтар, өҫтәмә ташламалар менән яҙылыу декадаһы башлана.**
**Ул 1-нән 10-сы июнгә саҡлы барасаҡ.**
**Кескәйҙәребеҙҙең яратып уҡыған “Аҡбуҙат” журналына, 2020 йылдың икенсе яртыһына, яҙылырға онотмағыҙ!**